*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# ЗӨЛХИЗӘГӘ КИЛӘ ЫШАНҒЫМ

*Очерк*

Башта ямғыр яуҙы. Ул күккә ерҙе, ерҙе күккә тоташтырҙы. Шунан ҡапыл, күҙ менән ҡаш араһында, һыу ҡойононда күпсегән һауа ҡояш нурына сумды.

— Иҫ киткес! — Солан ишегенән был күренеште күҙәтеп торған ҡыҙыҡайҙың шатлығы күкрәгенә һыйманы. — Иҫ киткес!



*Зөлхизә Ҡолбәйетова*

Эйе, Зөлхизә Шаһизатова өсөн был торғаны бер мөғжизә ине. Тик әле ул тойғоларының исем-атын ғына белмәй. Тағы ҡасан кисергәйне әле ул ошоға оҡшаш хисте? Тағы ҡасан әле уның йөрәге хәҙерге ише тыпыр-тыпыр ашҡынып типкәйне? Иҫенә төштө: бынан ике-өс йыл элек, ҡышын. Ул сакта Зөлхизә, һеңлеһе Рузиләне бәләкәй санаға ултыртып, клуб эргәһендәге тауға сана шыуырға китеп бара ине. Ҡаршыһына килеп сыҡҡан егеүле ат, әллә бесәй, әллә эттән өркөп, Рузилә ултырған бәләкәй сананың өҫтөнән үтеп китте. «Үлде Рузилә, үлде!» — ҡурҡышышынан ҡар ише ағарған Зөлхизә алға йүгерҙе, иҫенә килгәндә медпункттың болдоро аҫтында ултырыуын аңланы. Ҡурҡыуынан илай ҙа алмай ҡатып ҡалған ҡыҙ һыуыҡ ҡыш көнөндә ошонда әллә биш, әллә алты сәғәт ултырғандыр. Бына ҡараңғы ла төштө. Киске күкһел ҡараңғылыҡта Яңы Байрамғол ауылы өйҙәренең мөрйәләренән сыҡҡан төтөндәр ап-асыҡ күренә, тәҙрәләргә йән өрөп, уттар ҙа тоҡанды. Зөлхизә ойоған аяҡтарын ҡыбырҙата алмай тора бирҙе лә, яҙыла төшкәс, өйҙәре яғына ыңғайланы.

Атаһын хәтерләмәй ул. Уның хаҡында әсәһе Мәнфүзәнән, оло апайҙарынан, ағаһынан ишетеп кенә белә. Атаһының үлеүе алты балалы йортҡа ауыр ҡайғы килтергәнен дә төшөнә ул. Хәҙер инде шундай уҡ ҡайғыға, туғанын үлтереп, Зөлхизә сәбәпсеме? Их, ниңә Малбай ағайҙың аты Зөлхизәнең үҙен генә тапаманы икән?! Исмаһам, ошо мәлдә ул үҙ өйөнөң урындығында ятыр ине, хушлашырға килгән ағай-апайҙары, уны тирәләп, илашып ултырырҙар ине...

Зөлхизәнең үҙен йәлләүҙән күҙҙәренә йәш килде. Ошо йәшле күҙҙәре менән ул тартылмай ҡалған тәҙрә ҡорғаны ситенән үҙҙәренең өй эсенә ҡараны. Һәм, ни күҙе менән күрһен: Рузилә туғаны йомшаҡ мендәрҙәр өҫтөндә ултыра! Өй эсендәгеләр ҙә шат, хатта нимәгәлер көлөшәләр. «Мөғжизә» тигән һүҙҙең үҙен белмә-

һә лә, был мөғжизә ине! Ут яҡтыһында йөҙөк ҡашы кеүек балҡып осонған ҡар бөртөктәре лә, клуб башында тирбәлгән ҡыйырсыҡ ай ҙа — һәммәһе лә иҫте китерерлек!

Зөлхизә, ямғырҙан һуң битен йыуған йәш бала кеүек яҡтырып, уғата йәшәреп ятҡан сирәмгә ҡараны. Ошонан йүгереп төшһәң, Яйыҡтың тап үҙенә барып төртөләһең. Ямғырҙан һуң Яйыҡҡайҙың һыуҙары, уның йылыҡаслығы, йомшаҡҡаслығы… Эттәгенәһе, ул бит ҡашығаяҡ йыуып булаша ине. Әсәһенең ҡәҙерләп кенә тотҡан сервизын йыуып, шкафҡа яңынан матурлап теҙмәксе ине. Эх, әгәр ҙә ул сынаяҡтарҙы… Яйыҡҡа алып төшһә? Бына шулай итеп, батмусҡа теҙә лә батмусты башына ултырта. О! Зөлхизәнең инде күп тапҡырҙар батмусты башына ҡуйып әйләнгәне бар.

Башына батмус ултыртып алған Зөлхизә ҡояшҡа күмелгән йәшел сиҙәм буйлап әйләнә-әйләнә йырлап ебәрҙе:

Үктум этүм ҡәһәлту,

Үкә-инә әнһәмту…

Сирәм дә, ҡояш та, һуйыр таштарға эленеп тороп ҡалған ямғыр тамсылары ла гүзәл һинд ҡыҙының моңона ҡушылып әйләнә:

Үктум этүм ҡәһәлту,

Үкә-инә әнһәмту.

Тик! Аһ! Зөлхизә тайып йығылған еренән башын күтәргәндә затлы сынаяҡтарҙан ярсыҡтар ғына тороп ҡалғайны.

— Бына һиңә…

Юҡ, иламаны Зөлхизә. Һәм, ғөмүмән, иларға яратмай ул. Тормоштоң үҙенә гел кире ҡарауына күнегеп тә бөткән инде. Әсәһе магазиндан күлдәк һатып ала — Зөлхизәгә оҡшамай. Тиҙ генә ул уны яңынан киҫкеләп, үҙенсә тегеп ҡуя. Әсәһенән уның өсөн дә эләгә. Хәҙер ҙә эләгер инде, ҡаты эләгер! Зөлхизә ауыр саҡтарында ҡуйы япраҡтары араһына инеп йәшеренә торған ереге янына килде. Сәсен һыуға тығып йыуып ултырған һыу инәһенә оҡшаған ошо ерек. Башҡа ағастар һауаға ҡарап үҫкәндә, ул бер үҙе һыуға йығылған.

Зөлхизә шым ғына килеп ерек өҫтөнә атланды. Аяҡтарын Яйыҡтың йылы тулҡындары иркәләй, ағастың ҡытыршы, ләкин йылы олоно күңелгә тыныслыҡ, хатта ниндәйҙер ғәмһеҙлек өҫтәгәндәй. Рәхәт шул тулҡындарға, бер хәсрәтһеҙ ағалар ҙа ағалар…

— Һыу, ал мине үҙеңә, һыу?!

Юҡ, һыу алманы уны. Әллә Зөлхизәне йәлләне, әллә үҙенең хәтерен ҡаралауҙан ҡурҡты.

Яҙмыш менән бәхәсләшә-яғалаша үҫте Зөлхизә. Уның йөрәген яңынан-яңы дәрт менән тулышырға мәжбүр иткән ваҡиғалар ҙа булып тора бит әле. Ауылға телевизор килеү үҙе генә ни тора! Йә, был мөғжизә түгелме? Бер нәмәһен генә бораһың да өйөңдә рәхәтләнеп ултырып тамаша ҡарайһың! Әлбиттә, кино күрмәгән кеше түгел Зөлхизә. Клубҡа инеп тә ҡарай ул киноны, ә телевизорҙа бит бейейҙәр ҙә, йырлайҙар ҙа… Тыныслығын юғалтты ул шул саҡ. Көн дә кис урамға сыға ла телевизорлы кешеләрҙең тәҙрәләре зәңгәрһыу яҡтыға мансылғанды көтә, ә унан иплэп кенә шул йорттоң тупһаһын аша атлай. Хужалар телевизорын һүндереүге була — Зөлхизә ҡараңғы ауыл урамы буйлап өйөнә атлыға. Әсәһе Зөлхизәне түгел, унан күпкә оло ҡыҙҙарын кис йөрөргә сығармай. Был юлы оҙаҡҡа һуҙылды. Зөлхизә шым ғына инеп ятырмын тип уйлағайны, әммә… ишек эстән элеүле булып сыҡты. Ҡыҙыҡай нисек кенә инәлмәһен, индермәне әсәһе. Ярһыған Зөлхизә аласыҡтағы усаҡ эсенән ҡулына ҡором алды, шунан ул, эсендә ҡайнаған ғәрлек асыуына мансып, ҡоймаға ат башындай хәрефтәр менән: «Мәнфүз, үл инде, үл!» — тип яҙып ҡуйҙы.

Учалы ҡалаһындағы музыка училищеһына ла Зөлхизәне ана шул ғәрселлеге алып китте шикелле. Ни өсөн тигәндә, уҡытыусылар уны:

— Һин һуғыш суҡмарынан ниндәй кеше сыҡһын? — тип киҫәтәкөлә торған булдылар. Эйе, Зөлхизә малайҙарҙан йәберһетелгән апай-

ҙарын да, һеңлеһен дә, үҙен дә яҡлап һуғышты. Осон-оҫка саҡ ял-ғап йәшәгән ҡурсыуһыҙ ғаиләнең ғорурлығынан башҡа ние бар? Зөлхизә үҙҙәрен генә түгел, үҙҙәренең ямаулы кейемдәрен дә, етешһеҙ тормоштарын да яҡлап һуғышты.

Еңмешлеге ярҙам иттеме — инде Зөлхизә училищеға. Зөлхизәнең ҡулдары думбыра ҡылдарын сиртә, класта ул да, уҡытыусы. Төрмәләге кеүек.Ә күңеле унын ауылы туғайҙарын гиҙә, Яйыҡтың йылы тулҡындарында тирбәлә. Ҡолағына әсәһенең батмус сирткән ыңғайға:

Кәзә йүгерә тауға,
Һарыҡ йүгерә тауға.
Коммунизм етеп килә —
Насип ҡайнаға, алға! —

тип йырлағаны, кис ултырырға килгән апай, әбейҙәрҙең уйнағаны-көлгәне сағыла. Ә гәйет көнө байрамсылауҙар! Әсәһе уларға сағыу ҡорамаларҙан тоҡсай тегеп бирә. Зөлхизәләр, шуны алып, ауыл буйлап сығып китә. Ысын ярыш был: кем күберәк ризыҡ йыйыр? Кис, йыйған тәм-том менән ҡапҡа тышына сыҡҡас, Зөлхизәнең түбәһе күккә тейә: уныҡы, уныҡы иң күбе! Ә инде Маяҡтауға Май ашына сығыу, буялған йомортҡаны тауҙан тәгәрәтеү... Юҡ, Зөлхизә өсөн түгел был уҡыу йорто. Уға шау-шыу, тамаша, төҫтәр балҡышы кәрәк. Ә бында... Һәм Зөлхизә, өсөнсө курсҡа еткәс, документтарын ала...

Яңы Байрамғолға ҡайтып, клуб мөдире булып эшләп йөрөгәндә уны «Ләйсән»гә бейергә саҡыралар. Түбәһе күккә тейә Зөлхизәнең. Етмәһә, ансамбль Германияға китергә әҙерләнә. Көнө-төнө бейеһәләр ҙә, Зөлхизә арыу-талыуҙы белмәй. Сит илгә сығыу, таныш булмаған донъяны күреү мөғжизәһе алда торғанда, йоҡо-ял ҡайғыһымы?!

Ләкин, ансамбль сит илгә китергә нисә көн генә ҡалғас, Зөлхизәне алыштыралар. Аяҡ аҫтында ер убылғандай була ҡыҙыҡайҙың. Их, юҡ шул унын яҡлаусыһы, юҡ! Элек ул үҙен кәмһеткәндәрҙән һуғышып үсен ала ине, был юлы униһы ла мөмкин түгел. Беренсе тапҡыр күҙ йәштәренә ирек ҡуя Зөлхизә. Сәбәбен дә таба белделәр: имеш, бейей белмәйһең. Биллаһи-валлаһи, бейергә өйрәнер Зөлхизә! Етмәһә, ҡайтып үҙегеҙҙе өйрәтер!

... Зөлхизә йәй elәк һатҡан аҡсаһын йыйнаштыра ла Стәрлетамаҡтағы культура-ағартыу училищеһының бейеү бүлегенә уҡырға китә.

Училищела Зөлхизә Шаһизатова иң яҡшылар исемлегендә йөрөй. Ошонда ул Сибай егете Ринат Ҡолбәйетовты осрата. Бейеү сәнғәтенә ғашиҡ ике йәш йөрәк тиҙ аңлаша: күп тә үтмәй, улар уҡыуҙы ирлеҡатынлы Ҡолбәйетовтар булып дауам итә. Балалары тыуа. Уҡыуҙы тамамлар ваҡыт та етеп килә. Ошо саҡ «Композиция и постановка танца» тигән фәндән уҡытҡан Дия Васильевна, Зөлхизәне саҡырып алып:

— Төркөмдә һин — фантазиялы, оригиналь фекер йөрөтә белгән берҙән-бер студент. Училище белеме менән генә сикләнеп ҡалмаһаң, һинән бынамын тигән бейеү ҡуйыусы сығасаҡ! — ти.

Әммә Зөлхизәне тыуған яҡтары нығыраҡ тарта, әсәһе лә ҡартайҙы, һаулығы ла ҡаҡшаны. Ринат менән икәүләп ҡайтып, улар Яңы Байрамғолда эшләй башлай. Зөлхизә ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә «Байрамғол кадриле»н, «Чукча бейеүе»н һала. Әммә йәштәргә тормош башлап ебәреү өсөн ун икенең береһе юҡ — хатта тейешле подъемный аҡсаны ла бирмәйҙәр.

— Бында килеп, этелеп-төртөлөп йөрөмәһәң, — тип, ҡәйнәһе килеп, Ринатты алып ҡайтып китә. Энә ҡайҙа — еп шунда: Зөлхизә лә кескәй улы менән Сибайға китә.

Әкиәт кенә еңел һөйләнелә: Сибайҙа ла уларҙы бер кем дә ҡолас йәйеп ҡаршы алып тормай. Торлаҡ та, балаға баҡсала урын да юҡ. Зөлхизә үҙе — педучилищеға, Ринаты мәҙәниәт йортона... рәссам булып урынлаша. Зөлхизә эшкә балаһын үҙе менән йөрөтә, ләкин сабый эшкә ҡамасаулай. Тораraҡ бер мәрйә әбей табалар. Шулай эшләп йөрөгәнендә бер осраҡ Зөлхизәне

шаҡ ҡатырға мәжбүр итә: уның яңы теле асылып ҡына килгән Вадимы урыҫса һүгенеп ултыра! Сығырынан сығып ярһыған Зөлхизә балаһын күтәреп ала ла Ҡаҙағстандың Арҡалыҡ ҡалаһында йәшәгән Флүзә апаһына сығып китә. Юлда барғанда ғына ул сабыйына алмаш кейемдәр ҙә алмағанын төшөнә…

Арҡалыҡҡа килеп төшөү менән ул Пионерҙар һарайына килә.

— Бер ай эсендә бейеү күрһәтһәң, фатир булыр! — тиҙәр уға. Зөлхизә берҙе түгел, өстө күрһәтә: «Валенки», «Ложкари», «Ете ҡыҙ». Тегеләр ҙә һүҙҙәрендә тора: Зөлхизәгә ике бүлмәле фатир, балаһына урын бирәләр. Ире лә килә бында Зөлхизәнең, уны ла эшкә алалар.

Пионерҙар һарайының директоры бик тә оҡшата был башҡорт белгестәрен. Шуға күрә лә үҙенең хәүефен белдерә:

— Юғары белемле белгестәр килһә, уларҙы һеҙҙең урынға алыуҙары бар. Ә минең һеҙҙе юғалтҡым килмәй — инегеҙ институтҡа, — ти. Ә Зөлхизәнең күптәнге хыялы ла шул бит инде! Бер үҙе китеп, Чимкенттағы культура-педагогия институтының хореография бүлегенә уҡырға инә, аҙаҡ Ринатты ла институтҡа инергә күндерә.

Бына ошонда башлана ла инде белем алыу өсөн генә түгел, йәшәү өсөн дә көрәш. Үҙҙәренә йәшәргә урын, Вадимына балалар баҡсаһы булһын өсөн Ҡолбәйетовтар институт ҡушҡан бер генә эштән дә баш тартмай. Виноград йыйыуҙа башҡалар бер норманы саҡ-саҡ үтәһә, былар ике норма бирә. Зөлхизә йыш ҡына шундай уйға килә: әгәр ҙә бала сағында әсәләре кәрәктәрен биреп эшкә өйрәтмәгән булһа, ошо саҡлы ауырлыҡҡа түҙер инеме икән ул? Һаҙҙа утын да киҫте Зөлхизә, төндәрен уны елкәһенә һалып ташыны ла, бесән дә сапты, мал да баҡты. Бына ҡасан кәрәк булған уға ныҡыш хеҙмәт һабаҡтары!

Ә институтты бөткәс Башҡортостанға ҡайтыу өсөн әҙме көс түкте улар. Барыбер уйлағаны тормошҡа ашты: ирле-ҡатынлы Ҡолбәйетовтар Учалы музыка училищеһында яңы асылған башҡорт фольклоры бүлегенә хореограф булып эшкә килде!

Яңы эш яңы йөкмәтке талап итә. Ситтән ҡарап торған кешегә Зөлхизә Ҡолбәйетованың эшмәкәрлеге башҡаларҙыҡынан һис тә айырылманы: дәрескә килә, башлап ҡына асылған яңы бүлектең наҡыҫ шарттарында беҙҙең барыбыҙ кеүек үк юҡты барға ялғап эшләп йөрөй. Күп тә үтмәне, үҙебеҙҙең көс менән Рәми Ғариповтың 60 йыллығына әҙерләнә башланыҡ. Сценарийға Зөлхизә ҡуйған «Кем уҙмаҡ» бейеүен индерҙек. Традицион бейеүгә күнеккән Учалы тамашасылары ошонда беренсе тапҡыр һиҫкәнгәндәй булды шикелле. «Бәй, башҡорт бейеүенең бындай мөмкинлектәре лә бар икән дә?!» — тигән кеүек булды улар. Әммә бының менән генә Зөлхизә ҡуйған бейеүҙәр бөтмәне, музыка училищеһының һәр яңы сығышы тамашасыларға өр-яңы бейеү тәҡдим итә бара: «Илгәҙәк», «Еҙ ҡыңғырау», «Испан ҡыҙҙары бейеүе», «Сафия», «Кипи, котел!», «Ҡойон»…

«Кипи, котел!» Учалы ерлегендә тыуған шаян характерҙы образлаштырған күмәк бейеү булһа, «Ҡойон»о шулай уҡ 12 парға һалынған, тарихи темаға — мортазинсыларға арналған күмәк бейеү. Башҡорт тирмәһе, башҡорт йорто (Зөлхизә уны күк төҫтәге еңел туҡыма менән бирҙе) бейеүҙең башынан аҙағынаса лейтмотив булып барҙы.

Ул арала Зөлхизә һәләтле студенттарҙан «Нардуған» исемле фольклор төркөмө лә төҙөп алды. Учалы, Баймаҡ, Әбйәлил, Бөрйән районадарына сығып, яңы бүлекте пропагандалау эшен дә йәйелдерҙе. Ул арала йәш коллектив — Учалы музыка училищеһының фольклор бүлеге — бер түгел ике ҙур фестивалдә ҡатнашып, республика күләмендә абруй ҡаҙанырға ла өлгөрҙө. Учалы ҡалаһында уҙғарылған халыҡ бейеүҙәре фестивалендә икенсе урынды яулаһа, Өфөлә үткән халыҡ-ара хеҙмәттәшлек фольклор

фестивалендә дипломант булды һәм «Халыҡ бейеүҙәре ансамбле» исеменә иреште. Өлгәшелгән уңыштар тураһында Зөлхизә үҙе шулай фекер йөртә:

— Әгәр ҙә мине бергә эшләгән коллективым аңламаһа, мин уңышҡа өлгәшә алмаҫ инем. Гөлдәр Сабитовна Моратованың, бүлек мөдире буларaҡ, ансамблде сын-яһау итеп кейендереүҙә, үҙ оркестрын булдырыуҙа өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Фәрит Зәйнуллин, беҙҙең бөтә ихтыяжды ҡәнәғәтләндерергә әҙер торған училище директоры Юрий Яковлевич Колодкин һәм, ниһайәт, Учалы ҡалаһы хакимиәте... Эйе, эйе, беҙҙең уңыш — дөйөм уңыш...

Әммә Зөлхизәнең үҙенән дә ныҡышмалылыҡты, еңмешлекте Хоҙай йәлләмәгән. Быларҙан башҡа тәүәккәллек, саялыҡ та етерлек унда. Әсәһе уны бәләкәй сағында юҡҡа ғына: «Зөлхизә, һин бигерәк үҙең теләгәнсә ҡыланаһың!» тип орошмағандыр. Миңә ошо саялыҡтың тағы бер тапҡыр шаһиты булырға тура килде.

Ҡала Бөйөк Ватан һуғышында еңеүҙең 50 йыллығын үткәрергә әҙерләнә. Ваҡыт бик ҡыҫынҡы, ә бүлектең ошо концертҡа яңы коллектив бейеү менән сыҡҡыһы килә. Был эшкә буласаҡ концерттың режиссеры, хәҙер мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры урынбаҫары Гөлдәр Моратова айырыуса ныҡ тотонған: «Зөлхизә, яңы бейеү кәрәк!»

Декрет отпускыһына китергә һанаулы көндәре ҡалған Зөлхизә уйға сумды. Күпме музыка тыңланы, береһе лә ул уйлаған образды — һалдаттың үлемһеҙ рухын — тулыһынса аса алмаҫ төҫлө. Ниһайәт, ул Моцарттың «Лакримоза»һына туҡтала: йәндең мәңгелеге, рухтың үлемһеҙлеге хаҡында һөйләмәйме ни ошо юғары моң?!

Һәм эш китә ҡыҙып: егерме дүрт бейеүсегә бер аҙна ваҡыт эсендә күк һәм ҡара төҫтәрҙән ике яҡлы кейем тектерелә, һәр бейеүсенең ҡулына тотторорға май шәмдәр табыла. Унан һуң бейеү уртаһында индерелгән эпизод — һалдат ялын кәүҙәләндергән миҙгел өсөн дә кейем кәрәк. Күмәк көс, күмәк тырышлыҡ менән бейеү сәхнәгә сыға һәм зал тулы тамашасының күҙенә йәштәр эркелдереп, тулҡынландырып һәм әҫәрләндереп бейеп сығыла...

Уҡыусыла был Ҡолбәйетова башҡорт классик бейеү традицияларынан алыҫ торған зат түгелме икән тигән шик ҡалмаҫмы тип, Зөлхизәгә һорау менән мөрәжәғәт иттем.

— Башҡорт классик бейеүҙәре — ул беҙҙең алтын фонд. Мин, ғөмүмән, «Ете ҡыҙ» йәки «Гөлнәзирә»нең «Ләйсән», теге йәки был бейеү коллективының варианты итеп күрһәтеүҙәренә ҡаршымын. Классика бер ниндәй вариантҡа ла мохтаж түгел, ул саф, нисек бар, шулай һаҡланырға тейеш. Ә минең маҡсатым — башҡорт классикаһынан уҡталып, заман һәм милли характер ерлегендә өр-яңы бейеү тыуҙырыу. Ваҡыт үтеү менән алымдар, стиль үҙгәрә, үҙгәрмәй — характер ғына, — ти ул.

— Характер тигәндәй, мәрхүм Йәүҙәт Бикбирҙин ижадына нисек ҡарайһың?

— О, ул феномен ине! Уның бейеүҙәрендә ҡулдар, аяҡтар ғына түгел, йөҙҙәге һәр хәрәкәт характерҙы асыуға хеҙмәт итә. Минең ихтыярҙа булһа, уның һәр репетицияһын кино таҫмаһына төшөрөп алған булыр инем. Ниңә? Игорь Моисеевтың репетицияларын төшөргәндәр бит! Бикбирҙиндың да һәр репетицияһы беҙҙең кеүек хореографтар өсөн үҙе бер ижад мәктәбе булыр ине. Ләкин... һуң инде.

— Һин һалған бейеүҙәрҙә лә характер бирергә тырышыу ярылып ята...

— Эйе... Беҙҙең ауыл кешеләре үҙҙәре бер шауҡымлы, ҡыҙыҡлы инде ул. Минең олатай сәсән дә, Хужа Насретдин кеүек, мәҙәк тә бер кеше булған. Исеме Сиражетдин булһа ла, Сираҡан тип йөрөткәндәр уны. Уның көләмәстәрен әле булһа һөйләп йөрөтәләр. Бер саҡ Сираҡан ҡарт, үтә лә иҫке ситеген кейеп, мәсеткә барған. Муллаларҙың тәһә-

рәт алып намаҙға әҙерләнгән саҡтары икән. Сираҡан йәһәт кенә иң шәп ситектең тиҫкәре яғын әйләндереп ҡуя. Намаҙ бөткәс, мулла әле бер, әле икенсе ситекте тотоп ҡарай ҙа:

— Минеке түгел, быныһы ла минеке түгел, — ти икән. Сираҡан ҡарт:

— Бәй, һеҙҙеке булмағас, минеке була инде, әләйһәң, — тип, ситекте кейеп ҡайтып киткән.

Зөлхизә бер ни тиклем ваҡытҡа уйға батты. Күрәһең, уның күҙ алдынан ауылының мәҙәк холоҡло, мөғжизәләргә ышаныусан, юғары күңелле кешеләре үткәндер.

Ә һин үҙең һуң, Зөлхизә? Әгәр һин үҙең дә шул уҡ ҡамырҙан яратылмаһаң, яҙмыш һынлы яҙмыш менән ороша-һуғыша маҡсатыңдың иң олоһона ынтылыр инеңме?

Бына шулай Зөлхизә Ҡолбәйетова тыуған еренә ҡайтып танылыу тапты. Уның Башҡортостандың азатлығы өсөн көрәшеүселәргә арнап һалған «Муса Мортазин» исемле бейеүе Учалы хакимиәте булдырған Муса Мортазин исемендәге премияға лайыҡ булды, Учалы музыка училищеһының башҡорт фольклоры хореография бүлеге студенттарына һалған бейеүҙәре Башҡортостан ғына түгел, сит ил тамашасыларының алҡыштарын яуланы. Әммә тормош бер көйө тормай. Ижад кешеһенең күңеле яңы ерҙәр, яңы осош, яңы балҡыштар көҫәүсән. Зөлхизәгә лә ире Ринат:

— Әйҙә беҙҙең яҡҡа ҡайтайыҡ. Сибай гөрләй. Филармония, институт асылды. Унда һиңә лә, миңә лә рәхәтләнеп ижад итер өсөн бөтә мөмкинлектәр, иң мөһиме — теләктәштәр, рухташтар күп буласаҡ, — ти. Уйлана төшә Зөлхизә. Ул бит әле үҙ ыренең ҡыҙы булыуҙан тыш, Сибай килене. Иренең дә үҙ ҡалаһына хеҙмәт күрһәтеү теләгенең ихлас булыуына ышана. Бер саҡ улар Сибайға китергә ынтылып та ҡуйғайнылар. Кемдер юлдарына арҡыры төштө. Был юлы Зөлхизәне Сибай институтына саҡыралар. Бөтәһен дә үҙе башлаясаҡ, абынһа ла, һөрөнһә лә — бөтәһе лә үҙенән, тик үҙенән торасаҡ. Ә Зөлхизә үҙенә ышана. Икенсенән, институт директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовҡа ышана. Халыҡ рухын унан да нығыраҡ ҡайғыртҡан замандашты тағы ҡайҙа осратаһың?

Шулай итеп, Ҡолбәйетовтар ғаиләһе Сибайға күсеп килә. Башта ойоштороу эштәре еңел дә булмай. Таныш түгел кешеләр, бейеүгә әҙерлеге булмаған, бөтөнләй икенсе профилдә уҡыған студенттар...

Әммә Хоҙай Зөлхизәнән ныҡышмалылыҡты йәлләмәгән. Ул башкөллө эшкә сума. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Йәрмөхәмәтов бейеү ансамбленә костюмдар тектерә. «Ете ырыу» исемен йөрөткән бейеү ансамбле яҡынтирәләге районларға, төрлө фестивалдәргә, Өфөлә сығыш яһай. Мәләүез ҡалаһында уҙғарылған йәштәр бейеү фестивалендә, Өфө «Студент яҙы» фестивалендә премиялар яулай, 2001 йылда Сочи ҡалаһына юллана. Репертуарында 18 төр бейеү булған был коллектив быйыл «Халыҡ бейеү ансамбле» исемен яуланы. Ә инде бейеү дәрестәре уҙғарыла торған залға ҡарап башҡа юғары уҡыу йорттарына көнләшергә генә ҡала...

Һәр хәлдә «Ете ырыу» ансамбле сығышына ҡарап: «Сибай килендән унды», тип әйтергә генә ҡала бөгөн. Мәгәр ҡайнағалары ла һынатманы: Зөлхизәгә ҡолас йәйеп эшләр мөмкинлекте улар барлыҡҡа килтерештe.

Ейәнсәрҙәренән дә унды Сибай: Зөлхизәнең киниәбикәһе Сибайға килгән йылды уҡ «Ирәндек моңдары» фестивалендә бәләкәстәр төркөмөндә Гран-при яуланы.

Зөлхизә менән табындаш булырға тура килгән осраҡтарҙа уға коллегалары, шаяртып: «Мөғжизәгә килә ышанғым» тигән йырҙы үҙгәртеп, «Зөлхизәгә килә ышанғым» тип йырларға ярата торғайны. Дөрөҫ йырлағандар: Зөлхизәгә ышанырға була. Быны ул үҙенең булмышы, халҡын яратҡан йөрәге һәм тәбиғәт йәлләмәй биргән сағыу таланты менән раҫланы.